**БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ**
**ХӘЙБУЛЛА РАЙОНЫ МУНИЦИПАЛЬ РАЙОНЫ**
**ҮҘӘКЛӘШТЕРЕЛГӘН КИТАПХАНАЛАР СИСТЕМАҺЫ**
**МУНИЦИПАЛЬ АВТОНОМ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ**
**ҮҘӘК РАЙОН КИТАПХАНАҺЫ**
**БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ ҺӘМ ТЫУҒАН ЯҠТЫ ӨЙРӘНЕҮ БҮЛЕГЕ**

# Әсәйҙәр көнөнә арналған
# әҙәби-музыкаль кисә
# «Әсәйҙәр - тормош биҙәге»


**Сценарий авторҙары:**
*Рәмилә Файзуллина,*
*башҡорт әҙәбиәте һәм*
*тыуған яҡты өйрәнеү бүлеге мөдире,*
*Лира Такалова,*
*башҡорт әҙәбиәте һәм*
*тыуған яҡты өйрәнеү бүлеге китапханасыһы*


**Аҡъяр-2023 й.**

**1 алып барыусы**: Әсәй! Ер йөҙөндәге иң гүзәл, иң ғәзиз, иң яғымлы һүҙ – ул Әсәй! Шул һүҙ менән баланың теле асыла һәм ул бөтә телдәрҙә лә берҙәй яғымлы яңғырай. Һәр кемдең дә иң ҡәҙерле кешеһе - әсәй. Әсәнең йомшаҡ ҡулдарын, мөләйем ҡарашын, наҙлы һүҙҙәрен бер нимә менән дә сағыштырып булмайҙыр.

Әсә... Ниндәй бөйөк исем...
Нимә етә әсә булыуға?!
Ҡатындарҙың бөтөн матурлығы,
Сибәрлеге әсә булыуҙа.

**2 алып барыусы:** Башҡортостандың халыҡ шағиры Ҡәҙим Аралбай «Әсәй».

«Әсәй!» — тип телем асылған,
«Әсәй!» — тип юлға сығылған,
«Әсәй!» — тип бәхет табылған,
«Әсәй!» — тип урап ҡайтылған.

«Әсәй!» — тип төндә уянам,
«Әсәй!» — тип өндә ҡыуанам,
«Әсәй!» — тип йөрәк һыҙлаһа,
Ҡайтырмын бер, тип йыуанам…

Мине саҡырһа ла далам,
Юлдарға кәртә ҡоролған.
Тыуған яҡты һағыныуҙарым
«Әсәй!..» һүҙенән ҡойолған...

**1 алып барыусы**: Хәйерле көн, хөрмәтле саҡырылған ҡунаҡтар, ҡәҙерле әсәйҙәр, өләсәйҙәр!

**2 алып барыусы**: Һаумыһығыҙ, хөрмәтле, иң ҡәҙерле гүзәл заттарыбыҙ! Рәсәйҙә 28 ноябрь иң матур байрамдарҙың береһе – Әсәйҙәр көнө билдәләнә. Һеҙҙе ысын йөрәктән донъялағы иң матур, иң гүзәл байрамдарҙың береһе Әсә көнө менән ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ һәм «Әсәйҙәр - тормош биҙәге» исемле музыкаль-әҙәби кисәлә күреүебеҙгә шатбыҙ.

Һәр быуын өсөн әсәй мөхәббәт һәм наҙлылыҡ өлгөһө, рухи ҡиммәттәрҙе һаҡлаусы булып тора. Уның аша беҙ тормош менән танышабыҙ, тәүге яғымлы һүҙҙәрҙе ишетәбеҙ. Әсәнең һиҙгер йөрәге, күңел йылыһы

 яҙмыштың аяуһыҙ елдәренән, ҡатмарлы хәл-ваҡиғаларҙан һаҡлай. Нәҡ ул беҙҙә юғары кешелек сифаттарын тәрбиәләй, изге эштәргә фатихаһын бирә.

Әсә булыу – яуаплы һәм изгелекле бурыс. Ҡатын-ҡыҙ өй йылыһын, ҡотон һаҡлап ҡына ҡалмай, ә бар көсөн, белемен, тәжрибәһен ил эшенә лә ҡуша, тырышып хеҙмәт итә.

**1 алып барыусы**: Беҙ барыбыҙ ҙа әсәйҙәрҙең сикһеҙ һөйөүенән, һиҙгер күңеленең һәм хәстәрлекле ҡулдарының ҡәҙерен беләбеҙ һәм уға мәңге рәхмәтлебеҙ. Был матур байрам ғәзиз әсәйҙәребеҙҙең алдында баш эйеү, уның изгелегенә, хәстәрлекле ҡулдарына мәҙхиә йырлау өсөн иң уңайлы сәбәп.

Һөйҙөргән дә, көйҙөргән дә бала, - ти халыҡ. Тыуған илде үҙенең хеҙмәттәре менән данларлыҡ, егәрле, күркәм холоҡло балалар үҫтереү – һәр әсәнең изге бурысы.

Әсәкәйем

«Әсәй» тигән ҡыҫҡа ғына һүҙгә
Бөтә донъя һыйған, һыйынған!
Ҡояштың да иң-иң наҙлы нуры
Әсәй йөрәгендә ҡойонған!
Әсәкәйем минең! Яндарыңда
Гелән рәхәт, гелән күңелле!
Һиндә генә урын алғандыр ул
Йомшаҡлығы йөрәк, күңелдең!
Телкәйеңдән гел йылы һүҙ сыға,
Балаларым, тиеп йәшәйһең.
Ғүмеркәйең оҙондарҙан булһын,
Донъялағы иң шәп кешеһең!
*Рәзилә Ырыҫҡужина.*

Һеҙ күңелегеҙ менән һөйөү гөлдәре үҫтергән, наҙлы, иркә һүҙҙәр йөрөткән гүзәл әсәйҙәр! Барығыҙ ҙа балаларығыҙҙың тормошта уңыштарға өлгәшеүен күреп, һәр ваҡыт шатлыҡ-ҡыуаныстар ғына кисереүегеҙҙе теләйбеҙ. Балаларығыҙ һеҙгә үҙегеҙҙән алған изгелек һәм наҙ менән генә яуап бирһен! Йорттарығыҙ һәр саҡ үҙ-ара аңлашыу, именлек, муллыҡ һәм бәхеттән балҡып торһон!

***Район мәҙәниәт йорто йырсыһы, республика күләмендә үткәрелгән бәйгеләр конкурсы лауреаты Гөлфиә Хәләфетдинованан музыкаль бүләк***

**2 алып барыусы**: Ҡатын-ҡыҙҙың бөтә матурлығы, бөтә күрке әсә булыуҙа.

Хөрмәтле гүзәл заттарыбыҙ, беҙҙең һәр беребеҙҙә лә әсәйҙәребеҙҙең холҡондағы сабырлыҡ, түҙемлек, кешелеклек тә бөгөнгө бәхетле тормошобоҙҙоң бер сере булып торалыр. Бөтөн кешелек донъяһына йәм биреүсе, йылы ҡараштары менән назлаусы, аҡыллы фекерҙәре менән беҙгә аҡ юл күрһәтеүсе һөйөклө әсәйҙәребеҙҙе яҡты хистәр менән хөрмәтләп иҫкә алайыҡ.

***Һүҙ «Ағинәйҙәр»гә бирелә***

**1 алып барыусы**: «Ғаилә – йәмғиәттең нигеҙе». Һәр ғаилә – үҙе бер дәүләт ул. Ошо кескәй дәүләттәр ныҡ, матур булһа, илебеҙ ҙә ҡеүәтле, бәхетле була. Тышҡы ҡатмарлыҡтарға бирешмәй, ғаиләһен бөтөн, бәхетле, мөхәббәтле итеп ҡороу өсөн ҡул көсөн һәм күңел ҡеүәтен дә һалғандар күп арабыҙҙа.

Бөгөн беҙҙә ҡунаҡта күп балалы, өлгөлө, иманлы йәш әсәй, ҡул эштәре оҫтаһы Мәрйәм Сурина. Мәрйәм һылыу һабын ҡайнатыу менән шөғөлләнә, төрлө хуш еҫле һабындар эшләй.

***Һүҙ Мәрйәм Суринаға бирелә.***

**Район мәҙәниәт йорто ҡурайсыһы Фәнис Атанов башҡарыуында башҡорт халыҡ көйө «Уйыл», «Перовский»**

**2 алып барыусы**: Әсә хаҡында бик күп әҫәрҙәр, поэмалар, шиғырҙар, балладалар, ҡобайыр, бәйеттәр, йырҙар ижад ителгән. Улар тураһында күпме генә һөйләнһә лә, йырланһа ла, уларҙың күңел йылылығын, гүзәллеген, яғымлылығын әйтеп бирә белеүсе әҫәр һаман юҡ кеүек.

***«Әсәйҙәр донъя йәме» китап күргәҙмәһенә байҡау яһау.***

*Яҙыусы, журналист, прозаик Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре һәм атҡаҙанған уҡытыусыһы Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге һәм Сибай ҡалаһының Рамаҙан Өмөтбаев исемендәге премиялар лауреаты Хәйҙәр Тапаҡовтың «Әсәйемдең аҡ күлдәге» китабының йөкмәткеһен һөйләү һәм фекер алышыу.*

**1 алып барыусы:** Хөрмәтле гүзәл заттарыбыҙ һеҙҙе «Отҡорҙар һәм зирәктәр» исемле конкурста ҡатнашырға саҡырабыҙ.

**1 конкурс:** «Әсәй» тураһында мәҡәл-әйтемдәр әйтелә, һеҙ уларҙың аҙағын әйтеп бөтөрөп ҡуйығыҙ.

- Баланың бармағы ауыртһа, ……………..
- Әсә һөйөүенең……………………………
- Әсә күңеле балала, ………………………
- Әсә булмай,………………………………
- Үҙ әсәң - бауырһаҡ,………………………
- Ҡояш янында йылылыҡ,………………..
- Ишеге ямандың өйөнә барма,…………..
- Бала шатлығы - …………………………
- Бала өсөн әсәнең йөрәге,………………..

**2 конкурс:** «Һүҙ эсендә – һүҙ» конкурсына ике команда һәм етешәр кеше кәрәк. «Башҡорт» һүҙендәге хәрефтәр менән һүҙҙәр төҙөргә.

**3 конкурс:** «Йомаҡ – зиһен асҡысы»

Ағас түгел – япраҡлы,
тун түгел – тегелгән,
кеше түгел – һөйләй.

Ете туған юлға сыҡты,
Етеһе лә бер йәштә,
Исемдәре башҡа.

Үҙе бында,
Үҙе беленмәй.
Тынға беленә,
Күҙгә күренмәй.

Сөм ҡара ашъяулыҡтың
Уртаһында – аҡ табаҡ.
Ялтыр сынаяҡтарҙы
Бөтөрлөк түгел һанап.

Юлға сыҡтым,
Ике юл сатына еттем,
Бер юлы икеһе буйлап киттем.

Бер байлыҡ бар – янмай,
Ҡараҡ та урлай алмай,
Төшөп тә юғалмай.

Теле юҡ, һүҙе бар,
Күҙе юҡ, күрһәтә,
Бар нәмәне өйрәтә.

Тәҙрәһе юҡ, түбәһе тишек.
Ямғыр үтмәй, ел өрмәй.

**2 алып барыусы**: Хөрмәтле гүзәл заттар! Киләсәктә ғүмер миҙгеленең ҡәҙерен белеп, һәр атҡан таңға ҡыуанып, изгелек орлоҡтарын сәсеп йәшәһәң генә был тормоштоң матурлығын күрергә мөмкин. Ошо сифаттарға эйә булған оло йөрәкле, ҡәҙерле әсәйҙәр һеҙгә ныҡлы һаулыҡ, оҙон ғүмер, ғаилә именлеге теләйбеҙ. Балаларығыҙҙың ҡәҙер-хөрмәтенә төрөнөп, уларҙың изгелектәрен күреп йәшәргә насип булһын! Һау булығыҙ!